

# МИЛЛӘТ ҺАҒЫНДА

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, уның урындарҙағы бүлексәләре башҡарған эштәрҙең төп маҡсатына һәм бурыстарына мин түбәндәге мәсьәләләрҙе лә индерер инем: һәр башҡортҡа ғаиләһе, туғандары, бөтә ил менән ярлылыктан сығыу юлдарын эҙләү, эшһеҙ ятыуҙы туҡтатып, ғафиллыктан, вайымһыҙлыктан ҡотолоп, төрлө саралар ҡулланып өй ҡаралтыларын заманса яңыртыу, мал-тыуарҙы ишәйтеү, аҡса эшләү юлдарын табыу; балаларҙың тамағын туйҙырыу, өҫтөн бөтәйтеү, уларға белем биреп, оло тормош юлына сығыу шарттарын булдырыу, Ватаны Башҡортостанға, халҡына, уның тарихына, мәҙәниәтенә, теленә, бөйөк шәхестәренә иғтибар һәм һөйөү уятыу; рухи һәм матди ярлылыкта йәшәгән милләттәштәребеҙгә ҡарата ҙур түҙемлелек күрһәтеп, уларға ярҙам ҡулын һуҙыу; тирә-яҡ мөхитте һаҡлау; ил кисергән тормош ауырлыктарына, ил-ватан яҙмышына битарафлыкты бөтөрөп, ҡурҡыныс тыуғанда уны һаҡларға әҙер тороу; ата-бабаларҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына ихтирамлы булыу, уларҙы ҡәҙерләү, байытыу һәм үҫтереү хәстәрлеген күреү; эскелекте бөтөрөү, үҙеңдең, туғандарыңдың һаулығын һаҡлау, һаусәләмәт тормош өсөн тейешле шарттар булдырыу. Башҡорт булыу — иң тәүҙә ишле ғаилә булдырыуҙан, туғандарың, балаларың менән башҡортса һөйләшеүҙән, бәләкәстәргә әкиәттәр һөйләүҙән, туған йыр-мондарҙы, әҙәп-иманды һеңдереүҙән башланалыр ул.

Нияз МӘЖИТОВ,
Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы
Башҡарма комитеты рәйесе.



05.2002 Part 1.p65 39 06.06.02, 17:11